Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресе өлгөһө.
1 синыф.Бүләк дәреслеге буйынса.

Тема: Ә өн-хәрефе.

Маҡсат:

1. ә-өн-хәрефен айырыу,уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү,ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар тураһында төшөнсә биреү;
2. фонематик ишетеү һәләтен,һөйләү һәм яҙыу күнекмәһен үҫтереү;

иғтибарлылыҡ,үҙеңдән кеселәргә иғтибарлы булыу кеүек тойғолар тәрбиәләү.

Йыһаз:ҡурсаҡ,хәреф өлгөһө, өн анализына кубиктар,таратма материал, ижектәр таблицаһы, ДВД ,диск.

Дәрес барышы.

Ойоштороу моменты.

Артикуляцион фонетик күнегеүҙәр.

-һаумыһығыҙ ! Кәйефтәр нисек?(бер-береһенә ҡарап йылмаялар).
-Беҙгә кем ҡунаҡҡа килгән?
-Тере булһа был ҡурсаҡты кем тиер инек?
-Бәпес асыҡһа нимә эшләй?
-Нисек илай?(үә-үә-үә)
-Бәпес илаһа нимә эшләйҙәр?
-һеҙ үҙегеҙҙең ҡусты һеңлегеҙҙе йыуйатаһығыҙмы.?

Йырлау. Әлли-бәлли бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе?
Ҡайынлыҡҡа еләккә,
Бәпесенә бүләккә.
Әлли-бәлли,бәү-бәү.

Үтелгәнде ҡабатлау.

1. **Әңгәмә.**-Нимә менәнтанышабыҙ? (хәреф)

- Ниндәй хәрефтәрҙе беләбеҙ ?

А О Ы Э өлгө күрһәтеү .

2. һуҙынҡымы ,тартынҡымы икәнен асыҡлау.Өндәр ике өйҙә йәшәйҙәр икән.Был өйҙә тартынҡылар.Әйҙәгеҙ бергәләп тартынҡыларҙы үҙ өйҙәренә урынлаштырайыҡ.
3. Ә ниндәй һуҙынҡыларҙы беләһегеҙ?
4. Өндәр анализы. Бер уҡыусы таҡта алдында кубик менән , ҡалғандары урында карточкалар менән ,,бала “һүҙенең схемаһын эшләй.

Әҙерлек этабы.

1.Теманы асыҡлау.

Йомаҡты сисһәгеҙ ниндәй хәреф менән танышасағыбыҙҙы белерһегеҙ.

-Мин барыһын уятам,-тип
Ҡысҡыра,-кикирикүүүүк!
Бара торған ерегеҙгә
Һуңлап ҡуймағыҙ берүк!
Һис кәрәк түгел бәхәс,
Был булыр инде… .

Яңы тема.

Ә хәрефенең өлгөһөн күрһәтеү.
Дөрөҫ әйтергә өйрәнеү.
Нимәгә оҡшағанын асыҡлау.

Беҙҙең әтәс ,,ә” хәрефен
Суҡышына йәшергән.

Һүҙҙәр уйлау.

А Ә -хәрефтәренең әйтелешен тикшереү.Нимәһе менән айырыла?

-Һуҙынҡы өндәр ике ҡатлы өйҙә йәшәйҙәр икән.Беренсе ҡатта ҡалын әйтешле ҡалын һуҙынҡылар,икенсе ҡатта нәҙек һуҙынҡылар.

Үтелгән һуҙынҡыларҙы әйтеп ҡарап ҡаттарға урынлаштырыу.

Уйын .Нәҙек һуҙынҡы ишетһәң сәпәкәй ит.Ҡалын һуҙынҡы ишетһәң аяҡ тыпырлат.

Әтәс һүҙенең өндәр схемаһын төҙөү.Бер уҡыусы кубиктар менән.

Яҙыу минуты.

1. Өлгөлө күрһәтеү,балалар һанай.
2. Һауала яҙыу.
3. Дәфтәрҙә яҙыу.

Ял минуты. ,,Бесәй, бесәй бөс әле” уйыны.

Уҡыу минуты.

Ижекләп уҡырға өйрәнеү

Лә	сә	вә	әм
Рә	бә	зә	әт
Нә	дә	кә	әк
Мә	тә	шә	әр

- өлгөлө уҡыу;
- бергәләп уҡыу;
- үҙ аллы;
- һәр уҡыусы бер рәтте уҡый.

Ә

СӘЙ БЕЙ ТӘС

Ниндәй һүҙ килеп сығыр икән ?

Дәресте йомғаҡлау һәм баһалау.

Нимәгә өйрәндек? Ә хәрефе ниндәй һуҙынҡы?

Кемдәр дәрестә бик актив булды? Кемдәргә бөгөн маладис һүҙен биреп була.